# Ваҡыт етте иманга.

Ерҙә йәшәү дүерен,

Һәр бер кеше гүмерен.

Алла үҙе сикләгән,

Мәнгелек тә бар тигән.

Йәнебеҙгә мәнгелек,

Иманга кил иң элек.

Тәү заман “Тәүрәттә”

Ахырызаман сиратта.

Эйе етте ахыры,

Замандың аҙаҡҡыһы.

Борон әйтте олатай,

Булыр ул заман шулай.

Донъя үҙе боларыр,

Төрлө ауырыу булыр.

Кешеләр кейер күлдәк,

Ялан сәскәһе биҙәк.

Ерҙең көсөн күрерҙәр,

Күбәйер тетрәүҙәр.

Дауыл булыр аждаһа,

Йотар ул ҡалаһында.

Диңгеҙ һыуы ҡоторор,

Күпереп ҡайнап торор.

Кеше йәйәү йөрөмәҫ,

Үлем дә һайлап килмәҫ.

Тук булыр күптәр ҡоҫор,

Ҡалған аслыҡҡа дусар.

Югәнһеҙ булыр теле,

Тәртибе булыр кире.

Тәртипһеҙ булыр ҡыҙҙар,

Ирһеҙ бала табырҙар.

Донъяла китер боҙоҡ,

Ир ирҙе ятыр ҡосоп.

Ҡыҙ ҡыҙҙы йәнем тейер,

Малды ла ҡатын итер.

Боҙоҡлоҡ шуңа етәр,

Яһалма енес китер.

Бала әсәне белмәҫ,

Ата баланы күрмәҫ.

Тыуыр бала ташланыр,

Әсәйлектән ҡыҙ талыр.

Йыйылырҙар ҙур йортҡа,

Ҡарт атай менән ҡартҡа

Кәрәкмәҫ балаларға,

Күрәһең файҙаһыҙға.

Донъя көтөр алдашып,

Байыр бәндә урлашып.

Хуғыш ҡубыр донъяла,

Аптраша һаң бала.

Йәне тынныслыҡ тапмаҫ,

Йоҡо йоҡоло булмаҫ.

Бөтөр ерҙә дуҫлыҡ та,

Хас булыр яманлыҡ та.

Кеше булыр ялағай,

Һүҙҙе белмәҫ ярамай.

Ярамһаҡланыу уйы,

Башвнда көнө буйы.

Ултырыр ҡарап мөйөш,

Уның өсөн шул килеш.

Эше юҡ уның имеш,

Ялҡаулыҡ уға килеш.

Дин йорттары күп булыр,

Эсе уның буш торор.

Ҡыҙлар һатыр үҙ тәнен,

Ҡәҙерләмәҫ үҙ йәнен.